**Фәнисәнең күстәнәстәре**

Төҙөнө: тәрбиәсе Акилова Р.М.

**Интеграцион маҡсаттар:** балаларҙы емеш –eләктәрҙе танып дөрөҫ итеп атарға өйрәтеүҙе дауам итеү. Төҫтө, тәмде һәм еҫте аңлатҡан сифаттар менән таныштырыу:балалар аңлай алырлыҡ ҡыҫҡа күләмле шиғырҙы тыңларға һәм йөкмәткеһенә төшөнөргә өйрәтеү. Балалрҙың телмәр ағзалары мускулдарын нығытыу,үҫтереү. Емеш һәм йәшелсәләрҙе айыра белергә өйрәтеү.

**Һүҙлек эше:** ҡыҙыл, һары, тәмле, ҙур, әсе, бәләкәй.

**Йыһазландырыу:** ҡурсаҡ, емеш – еләктәр: алма, лимон,банан, әфлисун, тылсымлы тоҡсай, салфетка.

**Дәрес барышы:**

- Беҙгә бөгөн Фәнисә ҡунаҡҡа акилгән. Ул һеҙҙең менән һаулыҡ һораша, танышҡым килә ти. Әйҙәгеҙ Фәнисә менән һаулыҡ һорашайыҡ. (һәр бала үҙенең исемен әйтеп сыға). Афарин балалар, Фәнисә менән таныштыҡ. Ҡарағыҙ әле, ул буш ҡул менән килмәгән, ул тылсымлы тоҡсай менән нимәлер алып килгән.

-Ниндәй тәмле еҫтәр сыға, еҫкәп ҡарайһығыҙмы. Нимәнең еҫтәре сыға. Әйе, дөрөҫ, емеш – еләктәрҙең еҫе сыға.

-Ә хәҙер еҫкәп түгел, ә ҡарамайса тотоп әйтеп ҡарағыҙ, ниндәй емеш – еләк икәнен.

- Әйҙә Фәрхәт, кил әле, тоҡсайға ҡулыңды тығып алда әйт беҙгә нимәне тотоп алғаныңды. (емеште сығармайса әйтә) – Банан!

- Беҙгә сығарып күрһәт әле дөрөҫ таныныңмы икән. Балалар, дөрөҫ әйттеме. (әйе). Афарин Булат. Банан ниндәй формала (оҙонса). Афарин.

- Тағы ла нимәләр бар икән. Әйҙә Данияр, ҡарамайынса әйт нимәне тотҡаныңды. Нимә ул. (алма). Күрһәт әле, алма ниндәй формала (түңәрәк). Әйе дөрөҫ! Ә ниндәй төҫтә (ҡыҙыл). Ҡалған емештәрҙе лә ҡарап сығабыҙ.

- Минең емеш – еләктәр тураһында шиғырым да бар, тыңлағыҙ әле. Ниндәй емеш тураһында икән.

Беҙ йыйылдыҡ бер ергә,
Әфлисунды бүлергә.
Бәләкәстәр күмәктәр,
Әфлисун берәү генә.
Был өлөшө – тейенгә,
Был өлөшө – терпегә,
Был өлөшө – ҡуянға,
Был өлөшө – төлкөгә,
Ә ҡабығы – бүрегә.

- Ял итеп алдыҡ, хәҙер емеш – елктәр тураһында нимә хәтерегеҙҙә ҡалды икәнен тикшереп, һеҙҙән һөйләтеп алайыҡ.
*Балаларҙың һөйләүе.*
- Афарин, балалар биҡ яҡшы. Ә һеҙ емеш – еләк ашарға яратаһығыҙмы, улай булһа яратҡан емеш – еләктәрҙең һүрәттәрен буяп алайыҡ.